*Закир ЗИННӘТУЛЛИН*

# Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына — 10 йыл



*Бөтә донъя башкорттары королтайы Башкарма комитеты рәйесе Әхмәт Сөләймәнов*

Бынан ун йыл элек төрлө төбәктәрҙә йәшәгән милләттәштәребеҙ, боронғо башҡорттарҙың тарихи традицияларын яңыртып, оло йыйынға йыйылды. Халҡыбыҙҙың үткәне, хәҙерге йәшәйеше, киләсәге тураһында етди һөйләшеп, кәңәшләшеп, йыйын Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы ижтимағи ойошмаһын төҙөргә ҡарар итте. Ҡоролтай үҙ алдына төп мәсьәлә итеп халҡыбыҙҙы тергеҙеү, берләштереү юлдарын эҙләүҙе ҡуйҙы. Бынан өс йыл элек уҙғарылған Икенсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы ҡуйылған маҡсаттарҙы тағы ла анығыраҡ билдәләне. Ойошманың эшмәкәрлегенә тулы, теүәл баһа биреү киләсәктә йыйыласаҡ Өсөнсө ҡоролтай компетенцияһында, әлбиттә. Әммә Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының бер тиҫтә йыл эсендәге иң мөһим эштәренә, уңыштарына ла байҡау яһау кәрәктер.

Ҡоролтай хәрәкәте 1980-се йылдарҙың икенсе яртыһында барлыҡҡа килә башлаған башҡорт милли ойошмаларын туплаусы көс булды. Башҡортостанда был эште аҙағыраҡ ”Урал” Башҡорт халыҡ үҙәгенә берләшкән көстәр, Рәшит Шәкүр, Марат Ҡолшәрипов, Нияз Мәжитов, Әхмәт Сөләймәнов һәм башҡа күренекле зыялылар башлап ебәрҙе. Күрше өлкәләрҙән иң әүҙеме силәбеләр, уларҙың лидерҙары Урал Сәфиуллин, Марат Камалов, Тәлғәт Хәйеров, Алһыу Сирғәлина һымаҡ күркәм шәхестәребеҙ булғандыр. Ырымбур вәкилдәре Салауат Аҡдәүләтов, Рәмил Искәндәров, Ринат Тимеровтар ҙа уларҙан ҡалышманы. Милләттәштәребеҙ күпләп йәшәгән Һамар өлкәһендә Сынтимер Ғарифов, Ҡурған өлкәһендә Марат Вәлиев, Мөхәррәм Динмөхәмәтов һәм башҡалар ҙур әүҙемлек күрһәтте. Улар барыһы ла оло ихтирамға лайыҡ.

Ҡоролтай ойошмалары үҫеше дауам итә, төбәктәрҙә яңы лидерҙар килеп тора, араларында бик һәләтле, егәрле етәкселәр ҙә бар. Мәҫәлән, 36 мең башҡорт йәшәгән Ханты-Манси автономиялы округында 2003 йылда төбәк ҡоролтайы ойошторолоп, унын менән Рәүҙәт Ҡолмәнбә-

тов бик уңышлы етәкселек итә. Екатеринбургта Нәфисә Тюменцева, урындағы ҡоролтай ойошмаһынан тыш, Башҡортостан Республикаһының Даими вәкиллеген дә етәкләй.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы сит илдәр менән дә даими бәйләнеш тота. Һуңғы ваҡытта, мәҫәлән, Япония Төрки общинаһы етәксеһе Мөхит Тамимдар менән бәйләнеш булдырылды. Был исем төрки һәм ислам донъяһында киң билдәле.

Ҡоролтай хәрәкәтенең берҙәм селтәрен булдырыу һәм һаҡлап алып ҡалыу өсөн ҙур көс, сығымдар талап ителә. Урындағы хакимиәт структуралары менән дә эш итә белеү мөһим. Ҡоролтайҙарға методик, матди ярҙам күрһәтеү, конфликтлы хәлдәрҙән сығыу өсөн дә төбәктәрҙә даими эшләү кәрәк. Төбәктәрҙәге эш тәжрибәһе, Башҡарма комитеттың киңәйтелгән ултырыштары шуларҙы асыҡланы. Мәҫәлән, элекке оло, тарихи Башҡортостанға ингән төбәктәрҙә йәшәгән милләттәштәребеҙ, ҡағиҙә булараҡ, федераль даирәләр тәҡдим иткән милли-мәҙәни автономия идеяһына ҡаршы булыуын белдерә, сөнки ул идея халыҡ, милләт хоҡуҡтарын яҡлаусы халыҡ-ара хоҡуҡ нормаларында гарантияланған төп милләт хоҡуҡтары менән иҫәпләшмәй. Ә бына башҡорттар диаспора тәшкил иткән урындарҙа милли-мәҙәни автономиялар төҙөү мөмкин — был фекер Икенсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында ла, Башҡарма комитеттың киңәйтелгән ултырыштарында ла асыҡтан-асыҡ, ҡәтғи рәүештә әйтелде.

Әле Икенсе ҡоролтайҙың Башҡорт милли мәғарифы секцияһы ултырышында уҡ мәғариф министрлығы документтарында, министрлыҡ вәкилдәре сығыштарында, хатта министрлыҡ биргән мәғлүмәттәрҙе ҡулланыусы республика етәкселәре сығыштарында башҡорт телен уҡытыуға ҡағылышлы мәғлүмәттәрҙең ысынбарлыҡҡа тап килмәүе лә күрһәтелгәйне. Мәҫәлән, Өфөлә йәшәгән башҡорт балаларының 72 проценттан ашыуы туған телде өйрәнә тип иҫәпләнде. Ҡоролтай секцияһы ағзаһы, профессор Ирек Ғайса улы Аҡмановтың Икенсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы өсөн әҙерләгән мәғлүмәттәренә ярашлы, Өфөләге башҡорт балаларының 16 проценты ғына телде өйрәнеүе билдәле. Быға тиклем бирелгән дөрөҫ түгел статистиканың зыяны ҙур булды — уның нигеҙендә етди анализ яһау, ниндәйҙер рекомендациялар биреү, закондар, ҡарарҙар, башҡа рәсми документтар әҙерләү ауыр.

2004 йыл 26 майҙа уҙғарылған киңәйтелгән ултырышта Башҡарма комитет башҡорт теленең статусы менән бәйле көнүҙәк проблемаларҙы ла ентекләп тикшерҙе һәм шундай һығымталарға килде. ”Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында” закон нигеҙендә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ ғәмәлгә индереү өсөн өҫтәмә эш закондары пакеты (пакет рабочих законов) кәрәк, сөнки юғарыла күрһәтелгән закон күберәк декларатив характерҙа. БР Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтайҙың III саҡырылыш депутаттары парламентта ундай закондар пакеты өҫтөндә эшләй башлап, ”Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу тураһында” закон проектын әҙерләп тә ҡуя, әммә уны ҡарау туҡтатылған. Тормош үҙенекен талап итә, закон бөгөндән кәрәк — әйтәйек, мәҫәлән, ундай закон юҡта башҡорт телен мәктәптәрҙә милләте башҡорт булмаған балаларға уҡытыу ҙа әлегә законһыҙ ни-

геҙҙә алып барыла тип иҫәпләнә ала. Был эш ныҡлы хоҡуҡи нигеҙгә ҡуйылырға тейеш.

Ҡоролтай 2002 йылда уҙғарылған Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһында ла әүҙем ҡатнашты. Эш I һәм II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайҙарының программа документтары нигеҙендә алып барылды. Бының өсөн XVIII — XX быуаттарҙа үткәрелгән ревизия һәм халыҡ иҫәбен алыу документтары тикшерелде. Башҡарма комитет республиканың һәр районы буйынса айырым брошюралар әҙерләне, уларҙа төбәктәрҙең милли составы динамикаһы асып күрһәтелде. Был эшкә Әнүәр Әсфәндиәров, Дамир Ҡускилдин, Мөхәмәт Мырҙабулатов, Ҡәҙим Аралбаев һәм башҡалар күп көс һалды. Ошо осорҙа төньяҡ-көнбайыш райондарҙа йәшәгән милләттәштәребеҙ тарихына, тел үҙенсәлектәренә арналған байтаҡ ғилми хеҙмәттәр донъя күрҙе һәм, әлбиттә, халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләренә ыңғай йоғонто яһамай ҡалманы. Ләкин был йүнәлештә эш артабан да дауам итергә тейеш, сөнки төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының милли идентитеты, теле, мәҙәниәте тирәһендәге бәхәстәр туҡталғаны юҡ.

Башҡарма комитеттың Йәштәр советы үҙ эшенең төп йүнәлештәре тип профессиональ белем алыу, эш менән тәьмин итеү һәм торлаҡ менән бәйле проблемаларҙы күрһәтә. Уның эшмәкәрлеге БР Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты менән берлектә ҡорола. Быйыл 24 мартта уҙғарылған киңәйтелгән ултырыш, мәҫәлән, тулыһынса йәштәр проблемаларына арналды.

1996 йылдың 28 мартында Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинеты ҡарары менән Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы эргәһендә Башҡорт милләте үҫеше фонды ойошторолдо. 2002 йылда фонд Рәсәй Юстиция министрлығының Башҡортостан буйынса баш идаралығында теркәү үтте. Әлеге көндә фондтың эшмәкәрлеген үҙгәртеп ҡороу бара, республика ҡалаларында һәм райондарҙа уның филиалдары ойошторола.

Һуңғы ваҡытта Башҡарма комитет эшҡыуарлыҡты үҫтереү проблемаларына ла иғтибарҙы арттыра төштө. Әммә был йүнәлештәге эшмәкәрлек республикалағы эре бизнеста, эшҡыуарҙар араһында башҡорттар бик аҙ булыуы менән сикләнә. Был өлкәлә, мәҫәлән, үҙебеҙҙе республикалағы башҡа иң эре этностар — рустар һәм татарҙар менән сағыштырып ҡараһаҡ, шаҡтай ҙур диспропорция булыуын күрербеҙ. Ошо диспропорцияны кәметеү — дәүләт милли сәйәсәте кимәлендә алып барылырға тейешле эш, сөнки нәҡ ошо өлкәләге хәл баҙар иҡтисады шарттарында башҡорт милләтенең ышаныслы социаль, милли-мәҙәни үҫешенә көслө йоғонто яһай.

Ҡоролтай ер мәсьәләләре менән төплөрәк шөғөлләнеү өсөн Башҡорт ерҙәрен һаҡлау комитетын ойошторҙо. Уның төп эш маҡсаттары, исеменән үк күренеүенсә, түбәндәгеләрҙән ғибәрәт: ер мөнәсәбәттәре тураһында объектив информация туплау һәм таратыу, ергә хоҡуҡты яҡлауҙа хоҡуҡи ойошмалар, шул иҫәптән халыҡ-ара хоҡуҡ ойошмалары менән хеҙмәттәшлек аша башҡорт халҡының ергә хоҡуҡтарын ғәмәлгә ашырыу. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Башҡортостандың Ер кодексы хәҙер ғәмәлдән сығарылды, закондар Рәсәйҙекенә тап килтерелә. Тимәк, яңы реаль шарттарҙа эшләй башлау талап ителә. Төп проблема — ерҙең хоҡуҡи статусын юридик нығытыуҙа. Был проблеманы өйрәнгәндә иҡти-

садсылар, социологтар рекомендацияларына таянып эш итеү мөһим. Мәҫәлән, профессор Нурамбик Ғиниәт улы Арыҫлановтың раҫлауынса, республика ғалимдары, айырыуса социологтар, әле 80-се йылдар аҙағында уҡ, башҡорттар урбанизация йәһәтенән башҡа ике иң ҙур этностан — татарҙарҙан һәм рустарҙан ныҡ ҡалыша, киләсәктә ошо сәбәпле уларҙың бик ауыр социаль-иҡтисади хәлдә ҡалыуын күҙалларға мөмкин, тип киҫәтә башлағайны. Беҙҙә рустар, мәҫәлән, ҡалаға күсеп бөтөп бара, ә башҡорттарҙың ҙур өлөшө һаман ауыл ерендә ҡала. Башҡорттарҙың хәле, урбанизация процестары менән бәйле проблемаларҙы ентекләп өйрәнә башлау, ошо өлкәлә теүәл, аныҡ рекомендациялар талап ителә.

Башҡарма комитеттың һуңғы ултырыштарынан күренеүенсә, бөгөнгө көндә иң борсоғаны — Рәсәй Федерацияһы составындағы республикаларға янаған хәүеф. Федераль үҙәк халыҡтарҙың милли-территориаль дәүләтселек формаларын бөтөрөү эшенә тотондо. Уны аҙ һанлы халыҡтарҙан башланылар. Был эштә халыҡ-ара хоҡуҡи нормаларҙы тупаҫ рәүештә боҙоуға юл ҡуйыла. Милли-территориаль берәмектәрҙе юҡ итеү өсөн референдумдар ҡулланалар, ғәмәлдә иһә ул аҙсылыҡты тәшкил иткән төп милләт вәкилдәренең үҙбилдәләнеш хоҡуғын боҙоуға килтерә. Ошо процестарға баһа биреп, 2004 йылдағы һуңғы киңәйтелгән ултырыш тейешле ҡарар ҙа ҡабул итте. Уға ярашлы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы үҙ эшмәкәрлегендә милли республикаларҙың, шул иҫәптән Башҡортостан Республикаһының суверенитетын сикләүгә, ошо йүнәлештә сигенеүгә ҡаршы тороуҙа барлыҡ көстәрҙе берләштереү яҡлы. Әйтәйек, шул уҡ киңәйтелгән ултырышта Татарстан менән мөнәсәбәттәргә тейешле баһа бирелде. Күптәрҙең фекеренсә, күрше республикаға ҡаршы сығыштарҙы кисектермәй туҡтатырға кәрәк, сөнки улар ғәмәлдә ”бүлгелә һәм хакимлыҡ ит” лозунгыһы аҫтында эш итеүсе көстәргә генә файҙалы. Бында төп маҡсат — ике туғандаш милләтте бер-береһенә ҡаршы ҡуйып, иғтибарҙарын ҙурыраҡ хәүефтән ситкә йүнәлтеү. Ә иң ҙур хәүеф — республикаларға һәм халыҡтарға янағаны.

Ниһайәт, һуңғы киңәйтелгән ултырыштарҙың береһендә сираттағы III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын йыйыу зарурлығына күрһәтелде. Бынан ун йыл элек, 1995 йылдың июнендә үткәрелгән I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы халҡыбыҙҙың һәм республиканың сәйәси, социаль, иҡтисади һәм мәҙәни хәленә, үҫешенә ҡағылышлы мөһим программа документтары ҡабул итте. Бик һуңлатып, 2002 йылда ғына үткәрелгән II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, етди үҙгәрештәр кисергән ижтимағи-сәйәси хәлдең барлыҡ нескәлектәрен иҫәпкә ала алманы. Һөҙөмтәлә, мәҫәлән, һуңғы ултырыштарҙың һәр береһендә ҡоролтай йыйып ҡына хәл итә алырлыҡ бихисап проблемалар барлыҡҡа килеп тора һәм эшкә етди ҡамасаулай. Яңы иҡтисади-социаль һәм сәйәси шарттарҙа уңышлы эшләү өсөн төп эш документтарына, уставҡа мөһим үҙгәрештәр индереү талап ителеүе асыҡланды. Ҡоролтай эшмәкәрлеген финанслау, матди тәьминәт йүнәлешендә лә хәл ителмәгән мәсьәләләр күп, һәм улар эште тотҡарлай. Буласаҡ ҡоролтайҙа беҙҙе етди, ныҡлы һөйләшеү көтә.